Шаран районы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының район методик берекмә ултырышының **ҡарары.**

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары - милләтебеҙ һағында тороусылар, телебеҙҙе яҡлаусылар һәм һаҡлаусылар. Балаларыбыҙ күңелендә мәктәп эскәмйәһенән үк милли рух, теленә, халҡына һөйөү уятыу – беҙҙең бурысыбыҙ булып тора.

1-се һанлы Шаран урта дөйөм белем биреү мәктәбенең базаһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының методик берекмәһе ултырышы булды. Ул “Уҡытыусының эш сифаты һөҙөмтәһе –һәләтле шәхес үҫтереүҙә ” темаһы аҫтында үтте.Унда 16 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ҡатнашты.

Ултырышты район берекмәһе етәксеһе Ҡадирова Г.Ф. көн тәртибе менән таныштырыуҙан башлап ебәрҙе. Артабан, методик кабинет методисы Ғәлимова Г.Ф. 2020-2021 уҡыу йылының эш һөҙөмтәләренә йомғаҡ яһап, 2021-2022 йылға алға ҡуйылған бурыстар менән таныштырҙы һәм нимәгә иғтибарҙы күберәк йүнәлтергә икәнен иҫкәртеп үтте. Ә Салмалы урта дөйөм белем биреү мәктәбенән Минивәлиева Г.Ш. «Заманса үткәрелгән дәрестәрҙә телебеҙгә һөйөү уятыу» тигән темаға сығыш яһаны. Бай йөкмәткеле сығышында хәҙерге заман талаптарына ярашлы үҙ фекерен, тәҡдимдәрен еткерҙе. Шулай уҡ, методик берекмә етәксеһе Ҡадирова Г.Ф. башҡорт теленән уҙғарылған олимпиада, төрлө конкурстар, фәнни-ғәмәли конференциялар һөҙөмтәләре буйынса анализ яһаны һәм артабан эштәр һөҙөмтәлерәк булһын өсөн нимәгә иғтибар итергә, нисек әҙерләргә кәрәклеген аҫһыҙыҡлап китте.

Ултырышта ҡатнашыусылар башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү, туған тел дәрестәрен уҡытыуҙың сифатын күтәреү мәсьәләләре буйынса ла фекер алышты.

Тыңланған сығыштар һәм фекер алышыуҙар һөҙөмтәһендә ошондай ҡарарҙар ҡабул ителде:

- яңы уҡыу йылына РМБ планын ҡабул итергә ;
- башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙы камиллаштырыу өҫтөндә әүҙем эшләргә, инновацион технологияларҙы ҡулланып, уҡыу процесын алып барырға;
- республика, ҡала, район, мәктәп методик берекмәләре сиктәрендә методик эште дауам итергә;
- башҡорт телен ҡулланыуҙың даирәһен киңәйтеү маҡсатында киң ҡатлам уҡыусыларҙы кластан тыш сараларға йәлеп итергә;
- башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттарын заманса йыһазландырыу өҫтөндә эшләргә, кабинеттарҙың методик базаһын системалаштырыу өҫтөндә эшләүҙе дауам итергә;
- башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадаға уҡыусыларҙы әҙерләү кимәлен күтәрергә;
- фәнни эҙләнеү эшен ойоштороғанда уҡыусыларҙың үҙаллы эшләүенә, сығыш яһау оҫталығын үҫтереүгә ирешергә;
- уҡытыу процесында төрлө типтағы һүҙлектәрҙе әүҙем ҡулланырға;
- һәләтле балалар менән эште республика, Рәсәй кимәленә сығарыуҙы дауам итергә.

Методист: Г.Ф. Ғәлимова

Район берекмәһе етәксеһе: Г.Ф. Ҡадирова